# Вариант -1

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН берҙәм региональ имтихан

### Эште башҡарыу буйынса күрһәтмә

Имтихан ике өлөштән, 25 эш төрөнән тора. Беренсе өлөш 24, икенсе өлөш 1 эш төрөнән тора.

Башҡорт теленән имтихан эштәрен башҡарыу өсөн 3,5 сәғәт (210 минут) ваҡыт бирелә.

1-24 эш төрөнә яуапты цифр (һан) йә һүҙ (бер нисә һүҙ) менән яҙыу ҡаралған, һорауҙың яуабына ҡарап, цифр йә һүҙҙе бер-бер артлы яҙыу талап ителә. Яуапты эш тексының яуабы тигән асыҡ урынға яҙығыҙ, ә һуңынан №1 яуап бланкыһына түбәндә бирелгән өлгө буйынса күсерегеҙ.

Яуап:

| А | Б | В | Г | Д |
|---|---|---|---|---|
| *5* | *2* | *6* | *1* | *3* |

| | | | | | | | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 | 5 | 2 | 6 | 1 | 3 | | | | | | | | | | | | |

Яуап: килтерергәбарырға

| | | | | | | | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 | к | и | л | т | е | р | е | р | г | ә | б | а | р | ы | р | ғ | а |

Яуап: 124

| | | | | | | | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 | 1 | 2 | 4 | | | | | | | | | | | | | | |

2-се өлөштөң 25-се эш төрө уҡылған текст буйынса инша яҙыуҙы үҙ эсенә ала. Был эш төрө №2 яуап бланкында башҡарыла.

Бөтә БРИ бланктары сағыу ҡара ҡара менән тултырыла.

Эш төрөн башҡарғанда, ҡаралама менән ҡулланырға рөхсәт ителә. Эште баһалағанда, ҡараламала яҙыуҙар баһаланмай.

Һеҙҙең тарафтан башҡарылған эш төрө өсөн алынған балдар ҡушыла. Күберәк эш төрҙәре башҡарырға тырышығыҙ һәм күберәк балдар йыйығыҙ.

***Уңыштар теләйбеҙ!***



1-се өлөш

**1-24 –се эш төрҙәренә цифр (һан) йә һүҙ (бер нисә һүҙ), цифрҙарҙың (һан) бер-бер артлы булыуы яуап булып тора. Яуапты эш тексының яуабы тигән асыҡ урынға яҙығыҙ, ә һуңынан №1 яуап бланкыһына эш төрөнөң номерынан уңға, беренсе шаҡмаҡтан башлап, *<u>буш урын ҡалдырмай, өтөр һәм башҡа өҫтәмә символдарһыҙ яҙығыҙ.</u>* Һәр хәреф йә цифрҙы бланкыла күрһәтелгән өлгө буйынса айырым шаҡмаҡтарға яҙығыҙ.**

**Тексты уҡығыҙ һәм 1-3-сө эш төрҙәрен башҡарығыҙ.**

### ТЫУҒАН ИЛ

(1) Тыуған ил тыуған ерҙән башлана. (2)Башлана ғына шул әле. (3)Ул оло тойғо булып үҫеп китһен өсөн, тирә-йүндең йәмен йөрәгеңә һеңдереп, тойоп йәшәй башлап китеүең шарт.

(4)Тыуған ил тойғоһо иһә Тыуған ил, туған халыҡ төшөнсәләрен эсенә алыр һәм уның асылын тәшкил итер туған тарихы, мәҙәниәте, теле һәм моңо, ғөрөф-ғәҙәте һәм легендалары, ҡала һәм ауылдары, бар тәбиғәте һәм географияһы, бар булмышы һәм яҙмышы менән бер бөтөн булып тыуып, үҫеп китә.

(5) Әҙәмгә барыһы бала саҡта һалына. (6)Бала күңеле таҙа, унда ни яҙылһа, шул ҡала. (7)Аҙаҡ боҙолған һүҙҙәр, юлдар булһа, юйып бөтөрөүе ҡыйын, хатта мөмкин түгел.

(8)Тыуған илде һөйөү – һәр кемдең изге бурысы. (9)Әммә шул уҡ ваҡытта Тыуған илең дә һине һөйһөн.(10)Шунда ғына был тойғо ғәмәлгә ашҡан [ ] буласаҡ. (11)Тимәк, кеше илен һөйөүен эше менән аҡлап, Тыуған иленең һөйөүенә лайыҡ булһын, тигән һүҙ. *(130 һүҙ) (Ғ.Хөсәйеновтан.)*

1 Тексла булған ике мөһим һөйләмде билдәләгеҙ. Ул һөйләмдәрҙең номерҙарын яҙығыҙ.

(1) Тыуған ил тыуған ерҙән башлана.

(4)Тыуған ил тойғоһо иһә Тыуған ил, туған халыҡ төшөнсәләрен эсенә алыр һәм уның асылын тәшкил итер туған тарихы, мәҙәниәте, теле һәм моңо, ғөрөф-ғәҙәте һәм легендалары, ҡала һәм ауылдары, бар тәбиғәте һәм географияһы, бар булмышы һәм яҙмышы менән бер бөтөн булып тыуып, үҫеп китә.

(6)Бала күңеле таҙа, унда ни яҙылһа, шул ҡала.
(8)Тыуған илде һөйөү – һәр кемдең изге тойғоһо.
(10)Шунда ғына был тойғо ғәмәлгә ашҡан изге тойғо буласаҡ.

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

2

10-сы һөйләмдә ниндәй һүҙ (һүҙ теҙмәһе) төшөп ҡалған?
Тыуған ил
туған халыҡ
ил яҙмышы
изге тойғо

Яуап: ________________________

3

*Изге бурыс* һүҙенең дөрөҫ тәржемәһен аңлатҡан һүҙҙәрҙе уҡығыҙ һәм 8-се һөйләмдә ҡулланылған һүҙҙәрең дөрөҫ мәғәнәһен билдәләгеҙ. Түбәндә килтерелгән аңлатманан шул мәғәнәгә тап килгән һанды күсереп яҙығыҙ.

1) благое намерение
2) святая обязанность
3) благие пожелания

Яуап:

| |
|---|
| |

4

Түбәндәге һүҙҙәрҙең береһе хата менән яҙылған, шул һүҙҙе айырып яҙығыҙ.
аҡҡош
көньяҡ
мадти
сәйәхәт



Яуап: ________________________

5

Һөйләмдәрҙең береһендә билдәләнгән һүҙ лексик мәғәнәһе яғынан дөрөҫ ҡулланылмаған. Лексик хатаны төҙәтегеҙ. Алыштырған яңы һүҙҙе яҙығыҙ.
Тауҙар, яландар, йылғалар, күлдәр ап-аҡ ҡар менәнҠАПЛАНДЫ.
Китап – УҠЫУ шишмәһе.
Хәҙер инде серҙе БҮТӘН кешегә сискем дә килмәй.
Йәйге КАНИКУЛДАР башланды.

Яуап: ________________________

6

Һүҙҙәрәрҙең береһендә ялғауҙар яҙылышында хата бар. Хатаны төҙәтеп, һүҙҙе дөрөҫләп яҙығыҙ.
осоусы
боронғо
толомым
болоттоң

Яуап: ________________________

7

1-се бағаналағы грамматик хаталарға тап килгән һөйләмдәрҙе билдәләгеҙ. 1-се бағаналағы һәр позицияға икенсе бағаналағы позицияны күрһәтегеҙ.

| Грамматик хаталар | Һөйләмдәр |
|---|---|
| А) эйә менән хәбәр араһында бәйләнеш юҡ | 1) Ҡурай үҫә ҡайын урманы һәм аралаш урмандарҙа ҡыйы үлән араһында. |
| Б) һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе боҙолған | 2) Кешене хеҙмәт тәрбиәләй сыныҡтыра рухи яҡтан байыта. |
| В) тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә хата | 3) Балалыҡ дуҫтарын иҫенә төшөргәс Әмирхан йылмайҙы. |
| Г) айырымланған хәл әйтеме булған һөйләмдә хата | 4) Мин һеҙҙең фекерегеҙ менән килешкәндәр. |

Таблицаға тап килгән һөйләмдәрҙең һандарын хәрефтәр аҫтына яҙығыҙ.
Яуап:

| А | Б | В | Г |
|---|---|---|---|
| | | | |

8 Е хәрефе ике өндө белдергән рәт һүҙҙәрен күсереп яҙығыҙ.
телеүҙәк, телескоп
емеш, еп, ек, еләк, еҫ
теҙ, һеҙ, кей, кеүек
трест, телефон

Яуап: ________________________

9 Бер үк хәрефтәр төшөп ҡалған рәт һүҙҙәрен билдәләгеҙ. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе өҫтәп, һүҙҙәрҙе күсереп яҙығыҙ.
үлә…н, бүр…нә, мәкт…п
т…лкө, к…слә, т…рбиә
н…ктә, тәбиғ…т, ба…ыу
сәйәх…т, һ…йләм, у…ыусы

Яуап: ________________________

10 Ҡушма исемдәрҙең яҙылышында нәҙек айырыу билдәһе (ь) төшөп ҡалған һүҙҙе күсереп яҙығыҙ.
Гөл…йыһан
Гөл…емеш
Мең…япраҡ
Көн…сығыш

Яуап: ________________________

11 Дөрөҫ яҙылған рәттәге һүҙҙе күсереп яҙығыҙ.
Брестҡа
Брескә
Бресҡа
Бресткә

Яуап: ________________________

12 Айырым яҙылған һүҙҙе күсереп яҙығыҙ.
сүмес (баш)



ҡәйен (бикә)
Алма (бикә)
бала (саҡ)

Яуап: ________________________

13 Һөйләмдәрҙә билдәләнгән һүҙҙең ҡайһыһы ҡушылып яҙыла. Ҡушылып яҙылған һүҙҙе күсереп яҙығыҙ.
Уҡытыусы Рафиға апай БӨТӘҺЕНЕҢ (ДӘ) әҙер булыу-булмауы тураһында һорашты (С.Агиш).
Олатайым ҠУРАЙ (ҘА) матур уйнай торғайны.
Йыр артынан йыр ағыла, йырсы бер нәмәгә иғтибар итмәй ЙЫРЛАЙ (ҘА) йырлай.
ӘҠЛИМӘ (ЛӘ) беҙҙең менән юлға сыҡты.

Яуап: ________________________

14 Ялғау ҡушылғанда ТТ яҙылған һүҙҙе күсереп яҙығыҙ.
космонавт
быуат
трест
артист
Яуап: ________________________

15 **Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.** Бер өтөр ҡуйылған ике һөйләмде билдәләгеҙ. Ул һөйләмдәрҙең номерҙарын яҙығыҙ.
1) Ел туҡтаны ла урман ҡапыл тынып ҡалды.
2) Һәр кем үҙен туған халҡының ҡәҙерле игелекле улы-ҡыҙы итеп телгә алырлыҡ хатта маҡтанырлыҡ ғорурланырлыҡ итеп йәшәргә тейеш тик халҡының йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтерә күрмәһен! (Ғ.Хөсәйенов)
3) Һәйбәт дуҫың булһын өсөн үҙең һәйбәт дуҫ була бел. (Әйтем)
4) Тирә-йүн тыныс тик ҡибла яғында күк йөҙө яҡтыра башлауы ғына матур көн буласағын һиҙҙереп шатлыҡ вәғәҙә итә. (Ғ.Ибраһимов)

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

**16** **Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙең ике яғында ла өтөр ҡуйылған ике һөйләмдең номерҙарын яҙығыҙ.

1) Ул дыуамал һөргән китә инде. (Д.Юлтый)
2) Йә Әхмәзей ағай иҙәнеңде тигеҙләп алайыҡ. (Ж.Кейекбаев)
3) Минең юлдарым йәйғор кеүек.(Ә.Атнабаев)
4) Ат аунаған ерҙә төк ҡала. (мәҡәл)

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

**17** **Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.** Һөйләмдәрҙә һандар урынына һыҙыҡ ҡуйылған һөйләмдәрҙең номерын айырып яҙығыҙ.

1) Китап (1) белем шишмәһе.
2) Исеме Зифа икән дә (2) буйы ла зифа икән.
3) Йәй эшләһәң (3) ҡыш ашарһың.
4) Башҡортостан (4) йырлы ил.

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

**18** **Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.** Һөйләмдә һандар урынына өтөр ҡуйылған цифрҙы күсереп яҙығыҙ.
Көҙ ҡапыл сырайын һытты (1) күк йөҙөн болоттар ҡапланы(2) йонсоҡос ваҡ ямғырҙар һибәләргә тотондо.

Яуап: ________________________

**19** **Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.** Һан урынына ике нөктә ҡуйылған ике һөйләмдең номерҙарын яҙығыҙ.

1) Йыр дәресендә уҡытыусы шул хаҡта һөйләне (1) башҡорт халыҡ йырҙарының һәр береһенең тарихы бар икән.
2) Ер-әсәбеҙ ҡуйынындағы һәммә хазина (1) бөтә тереклек һинең рәхимеңә тапшырылған (Н.Мусин).
3) Китапхана байлығы (1) ул бөртөкләп йыйылған алтын (С.Әлибай).
4) Сәбәбе шунда (1) беҙҙең яҡшы эшләүебеҙҙе талап итәләр.

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |



Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

**Тексты уҡығыҙ һәм 20-25-се эш төрҙәрен башҡарығыҙ**

**Һинең яҡын дуҫың хаҡында**

(1)Тәбиғәтте һаҡлау тигән нәмә ҙур төшөнсәне үҙ эсенә ала. Быны аңламау, тәбиғәтте һаҡламау – үҙ-үҙеңә дошман булыу тигән һүҙ. (2)Тәбиғәт ул беҙҙең туған әсәбеҙ менән бер. (3)Унһыҙ тормош юҡ, мәҫәлән, урманды ғына алайыҡ.

(4)Урман кешегә торлаҡ йорттары һәм ҡаралтылары өсөн ағас бирә, ул кешегә емештәр, китап-дәфтәрҙәр бирә, һалҡын ҡыштарҙа туңдырмай һаҡлап алып ҡала. (5)Ҙур караптарҙың күп өлөштәренән башлап иң нескә музыка ҡоралдарына, балаларҙың һөйкөмлө уйынсыҡтарына тиклем ағастан яһала, һин тыуғас уҡ, әсәйең һине урман бүләк иткән бишектә тирбәткән…

(6)Урман ҡоро елдәргә кәртә була, ерҙә дым тота, иген баҫыуҙарын көйөп һәләк булыуҙан, шишмәләрҙе ҡороуҙан һаҡлай.

(7)Ә һеҙ Башҡортостан балының бөтә донъяла дан тотоуының сәбәбен беләһегеҙме?(8) Башҡортостанда йүкә урмандары күплектән ул. (9)Урман, һинең тының иркен булһын өсөн, үҙе боҙоҡ һауаны йотоп, саф кислород айырып сығара.

(10)Эш файҙаламы ғына һуң әле. (11)Урман кешеләрҙең тормошон матурлай. (12)Ер йөҙөнөң иң аҫыл биҙәктәренең береһе – йәшел, ләҫ урман. (13)Ул һинең өсөн аҡландарында күҙ яуын алырлыҡ матур сәскәләр, ҡыҙарып бешкән еләктәр әҙерләп ҡуйған, һинең өсөн ағастар араһында былбылдар һайрай…

(14)Урман йәй көндәрендә ял итергә саҡырып тора. (15)Унда күңелдәрегеҙ ҡанғансы уйнағыҙ! (16)Тик үҙегеҙҙе шулай йомарт ҡунаҡ иткән дуҫығыҙға яуызлыҡ эшләп кенә китмәгеҙ. (17)Аҡланда усаҡ яғыу – күңелле

нәмә, әммә уның бик ҡурҡыныс яғы бар. (18)Һүндерелмәй ҡалған усаҡтар ҙур янғындарға сәбәп була, ә урмандағы янғын – иң ҙур һәләкәткә килтергән афәттәрҙең береһе.

(19)Һин йәш бер ағасты һис бер нәмә уйламай ғына киҫһәң дә, киләсәк өсөн ҙур зыян, хатта енәйәт эшләйһең, дүрт-биш йәшлек шыптағай ҡарағайҙы һындырһаң, илле-алтмыш йылдан карап мачтаһы булырлыҡ бер ҡиммәтле ағасты һәләк итәһең. *(Ф.Иҫәнғолов.)*

**20** Тексттың йөкмәткеһенә ниндәй фекер тулыһынса тап килә? Яуаптың номерын күрһәтегеҙ.
1) Урманда йөрөүҙең файҙаһын күрһәтә.
2) Ағастарҙың саф кислород сығарыуын белдерә.
3) Урман кешеләрҙең тормошон матурлауын һөйләй.
4) Урмандың кешеләрҙең яҡын дуҫы булыуы хаҡында тасуирлай.

Яуап: ________________________

**21** Һаналып кителгән раҫлауҙарҙың ҡайһыһы дөрөҫ? Яуаптарҙың номерҙарын күрһәтегеҙ.
1) 3-сө һөйләм 2-се һөйләмдәге фекерҙе инҡар итә.
2) 5-се һөйләм 4-се һөйләмдә хәбәр ителгән фекерҙе дауам итә.
3) 18-се һөйләм 17-се һөйләмдең йөкмәткеһен аса.

Яуап: ________________________

**22** 5 -6-сы һөйләмдәрҙә антоним һүҙҙәрҙе табып яҙығыҙ.

Яуап: ________________________

**23** 14-19-сы һөйләмдәрҙә теркәүес ярҙамында бәйләнгән һөйләмдәрҙең һанын күрһәтегеҙ.

Яуап: ________________________



***24-се эш төрөн башҡарыу өсөн тәҡдим ителгән текст нигеҙендә яҙылған рецензиянан фрагмент уҡығыҙ.***
***Был фрагментта тексттың тел –һүрәтләү үҙенсәлектәре ҡарала. Рецензияла ҡулланылған терминдар төшөп ҡалған. (А, Б, В, Г, Д, Е) төшөп ҡалған һандар урынына исемлектәге тап килгән терминдарҙы яҙығыҙ. Таблицала һәр хәреф аҫтына тап килгән һанды яҙығыҙ.***
***Һандарҙың бер-бер артлы килеүен №1 ЯУАПТАР БЛАНКЫҺЫНДА 24 эш төрөнән уңға табан, беренсе шаҡмаҡтан башлап, буш урынһыҙ, өтөрһөҙ һәм өҫтәлмә символдарһыҙ яҙығыҙ.***
***Һәр бер цифрҙы өлгө бланкыһындағы талаптарға ярашлы яҙығыҙ.***

**24** Автор урман бүләк иткән әйберҙәрҙе күрһәтеү өсөн А__________________ (“иң нескә” 5-се һөйләмдә) ҡуллана. Урман кешеләргә иркен тын алырға ярҙам итеүен аңлатыу өсөн Б_________________ “боҙоҡ һауа, саф кислород” 8-се һөйләмдә) ҡулланыу аша аса. Урмандың ер йөҙөнөң иң аҫыл биҙәктәренең береһе булыуын В_________________ “йәшел, еләҫ” 12-се һөйләм) ярҙамында дәлилләй. Урманда усаҡ яғыуҙың ҡурҡыныс булыуын Г _________________ (“әммә” 17-се һөйләмдә “ә” 18-се һөйләмдә) ярҙамында аңлата. Бер ағасты киҫеп, урманға күпме заян килтереүҙе Д_________________ “өсөн” һәм Е _______________ (“дүрт-биш, илле-алтмыш,” 19-сы һөйләмдә) ярҙамында дәлилләй.

1) сағыштырыу
2) эпитет
3) антонимдар
4) теркәүестәр
5) синонимдар
6) тиң сифаттар
7) фразеологизмдар
8) бәйләүестәр
9) сама һандары

Яуап:

| А | Б | В | Г | Д | Е |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | |

***Башҡарылған эштәр инструкцияһына ярашлы №1 ЯУАПТАР БЛАНКЫҺЫНА бөтә яуаптарығыҙҙы күсерергә онотмағыҙ.***

2-се өлөш

*Был эш төрөнә яуаптар өсөн №2 ЯУАПТАР БЛАНКЫҺЫН ҡулланығыҙ.*

25 Уҡылған текст буйынса инша яҙығыҙ.

Текстың авторы тарафынан ҡуйылған бер проблеманы аныҡ итеп билдәләгеҙ. Билдәләнгән проблемаға үҙ комментарийығыҙҙы бирегеҙ. Текстың төп фекерен билдәләү өсөн мөһим булған ике миҫал индерегеҙ (текстан артыҡ цитататалар ҡулланмағыҙ).

Автор (һөйләүсе) позицияһын аныҡ билдәләгеҙ. Уҡылған текстағы автор ҡарашы менән килешеү-килешмәүегеҙ тураһында яҙығыҙ. Ни өсөн килешеү-килешмәүегеҙ тураһында аңлатығыҙ. Үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе, иң беренсе сиратта, уҡыусы тәжрибәһенән, шулай уҡ белем һәм тормош күҙәтеүҙәренән сығып аңлатығыҙ (тәүге ике аргументты иҫәпкә алығыҙ).

Инша күләме – 150 һүҙ.

Тексҡа нигеҙләнеп яҙылмаған текст (тәҡдим ителгән тексҡа нигеҙләнмәһә) баһаланмай. Уҡыусы иншаһын бер ниндәй ҙә комментарий яҙмай, йөкмәткеһен йә тексты тулыһынса күсереп яҙһа, ундай эш **0 балға** баһалана.

Инша таҙа, асыҡ, аңлайышлы почерк менән яҙыла.